# Башҡорт әҙәбиәте,9 класс.

Дүртенсе сиректә үтелгәндәр буйынса тест һорауҙары.

## 1. М.Ғафури ҡайһы йылдарҙа йәшәгән?

- а) 1895 – 1919;
- б) 1880 – 1934;
- в) 1831 – 1895;
- г) 1841 – 1907;
- ғ) 1871 – 1931.

# 2. М.Ғафуриҙың атаһы кем булған?

- а) мулла;
- б) хәлфә;
- в) крәҫтиән;
- г) староста;
- ғ) старшина.

## 3. М.Ғафури ҡайҙа тыуған?

- а) Әсән;
- б) Туҡһанбай;
- в) Еҙем-Ҡаран;
- г) Ибраһим;
- ғ) Келәш.

# 4. М.Ғафури иң һуңынан ҡайһы мәҙрәсәне тамамлай?

- а) Еҙем-Ҡаран;
- б) Ҡыйышҡы;
- в) «Ғәлиә»;
- г) «Рәсүлиә»;
- ғ)«Мөхәммәҙиә».

# 5. М.Ғафури ҡайҙа ерләнә?

- а) Еҙем-Ҡаран;
- б) Өфө;
- в) Ҡазан;
- г) Троицк;
- ғ) Ҡыйышҡы.

## 6. М.Ғафури Башҡортостандың халыҡ шағиры исемен ҡасан ала?

- а) 1902;
- б) 1911;
- в) 1923;
- г) 1934;
- ғ) 1930.

# 7. Йәмилә образы М.Ғафуриҙың ҡайһы әҫәрендә һүрәтләнә?

- а) «Фәҡирлек менән үткән тереклек»;
- б) «Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын»;
- в) «Шағирҙың алтын приискыһында»;
- г) «Тормош баҫҡыстары»;
- ғ) «Ҡара йөҙҙәр».

## 8. М.Ғафури сәскәләрҙең кеше хеҙмәте емеше икәнлеген ҡайһы шиғырында күрһәтә?

- а) «Баҙарға сыҡтым»;
- б) «Ант»;
- в) «Эшсе»;
- г) «Гөлдәр баҡсаһында»;
- ғ) «Бир ҡулыңды».

# 9. Ғәлимә образы М.Ғафуриҙың ҡайһы әҫәрендә һүрәтләнә?

- а) «Ҡара йөҙҙәр»;
- б) «Эшсе»;
- в) «Тормош баҫҡыстары»;
- г) «Шағирҙың алтын приискыһында»;
- ғ) «Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын».

## 10. «Шағирҙың алтын приискыһында» повесында «Дәрдмәнд» имзаһы менән яҙылған шиғырҙарҙың эйәһе кем?

- а) Сәлим;
- б) Сибәғәт;
- в) Закир;
- г) Шакир;
- ғ) Хәҙисә.

# 11. Композиция нимә ул?

- А) әҫәрҙең ҡоролошо;
- Б) герой һынын һүрәтләү;
- В) образға характеристика;
- Г) телмәр характеристикаһы;
- Ғ) автор характеристикаһы.

## 12. Инеш, хәрәкәт үҫеше, төйөнләнеү кеүек һыҙаттар композицияның ниндәй үҙенсәлеген асыҡлай?

- а) сюжет элементтары;
- б) автор характеристикаһы;
- в) герой телмәре;
- г) образға анализ;
- ғ) портрет.

## 13. Персонажды, образды характерлау, тышҡы йөҙөн, һынын күрһәтеү нисек атала?

- а) композиция;
- б) сюжет;
- в) портрет;
- г) телмәр характеристикаһы;
- ғ) автор характеристикаһы.

# 14. М.Ғафуриҙың «Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын» әҫәре ниндәй художестволы метод менән яҙылған?

- а) реализм;
- б) тәнҡитле реализм;
- в) романтизм;
- г) классицизм;
- ғ) сентиментализм.

# 15. Ш.Бабич ҡайһы йылдарҙа йәшәгән?

- а) 1895 – 1919;
- б) 1880 – 1934;
- в) 1831 – 1895;
- г) 1841 – 1907;
- ғ) 1871 – 1931.

# 16. Ш.Бабич һуңғы белемде ҡайҙа ала?

- а) Троицкиҙа;
- б) Ҡазанда;
- в) «Ғәлиә» мәҙрәсәһендә;
- г) «Мөхәммәҙиә»лә;
- ғ) «Хөсәйениә»лә.

# 17. Ш.Бабич ҡайҙа эшләгәнендә «Башҡорт халҡына көйлө хитап» әҫәрен яҙа?

- а) Троицкиҙа уҡытҡанында;
- б) Ырымбурҙа «Ҡармаҡ» журналында;
- в) Башҡорт хөкүмәтендә сәркәтип булғанда.
- 

# 18. Ш.Бабич музейы ҡайҙа урынлашҡан?

- а) Әсән ауылында;
- б) Йылайырҙа;
- в) Троицкиҙа;
- г) Ырымбурҙа;
- ғ) Өфөлә.

## 19. Ш.Бабичтың башланғыс ижадында мәғрифәтсе буларак уй-фекере ҡайһы әҫәрендә сағыла?

- А) «Китап»;
- Б) «Көтәм»;
- В) «Ҡурайҡайға»;
- Г) «Салауат батыр»;
- Ғ) «Башҡорт халҡына көйлө хитап».

# 20. Был юлдар ҡайһы шиғырҙан?

- **Ян, минең аҡ күкрәгем, ян, ян, яныып тор мәңгегә.**
- А) «Халҡым өсөн»;
- Б) «Кем өсөн?»;
- В) « Бер минут»;
- Г) «Аптыраған минуттарҙа»;
- Ғ) «Көтәм».

# 21. Был юлдар ҡайһы шиғырҙан?

- **Беҙ үҙебеҙ - башҡорттар,<br>Күп ырыуға баш йорттар.**
- А) «Салауат батыр»;
- Б) «Беҙ»;
- В) «Яҙғы йыр»;
- Г) «Көтәм»;
- Ғ) «Ҡурайҡайға».

# 22. Был юлдар ҡайһы әҫәрҙән?

- **Инде тырышып ҡотортайыҡ, аҙҙырайыҡ,**
- **Бәндәне выждан юлынан яҙҙырайыҡ.**
- А) «Йәшәһен ҡиммәтселек»;
- Б) «Ҡандала»;
- В) «Ғазазил»;
- Г) «Исемдәр донъяһында»;
- Ғ) «Китабеннас».

## 23. Ш.Бабичтың «Йәш Башҡортостан» тигән тәүге китабы ҡасан баҫылып сыға?

- а) 1917;
- б) 1918;
- в) 1919;
- г) 1920;
- ғ) 1921.

## 24. «Бер минут» шиғырында строфалар нисә юлдан килә?

- а) ике;
- б) өс;
- в) дүрт;
- г) биш;
- ғ) алты.

## 25. «Ҡурайҡайға» шиғырында ҡайһы юлдар рифмалашып килгән?

- А) а-а-а-а;
- Б) а-б-а-б;
- В) а-а-б-а;
- Г) а-а-а-б.